# ТӘКӘББЕРЛЕК

Айгиз САФИН

Ҡайһы бер саҡ кешенең йөрәген ауырлыҡ тойғоһо ялмап алыусан, уның иманы, йәшәү рәүеше боҙола башлай. Ҡағиҙә буларак, бындай сир кешегә һиҙҙермәйсә генә яҡыная һәм яйлап-яйлап, ҡарышлауыҡ алманы ашаған кеүек, йөрәкте тишкеләргә тотона. Бындай хәл килеп сыҡмаһын өсөн, кеше һәр ваҡыт уяу булырға, үҙ йөрәген ҡурҡыныс сирҙән һәр яҡлап һаҡлап торорға тейеш. Ул сир - тәкәбберлек. Шәриғәт буйынса, тәкәбберлек сире кешенең бүтәндәрҙең фекере менән иҫәпләшмәүенән күренә. Ә бар бәлә иһә үҙенде башҡаларҙан өҫтөнөрәк хис итеүҙән башланып китә. Был сир тураһында Мөхәммәт пәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм): "Йөрәгендә тамсы тәкәбберлек булған кеше ожмахты күрмәйәсәк", - тип әйтеп ҡалдырған.

Тәкәбберлек - ул Иблис ауырыуы, шул тәкәбберлеге арҡаһында Иблис Аллаһтың тоғро хеҙмәтсеһенән яуыз шайтанға әйләнгән. Тәкәбберлек диндә аҙашыуға йәки дингә бөтөнләй инкар итеүгә килтерә. Ошо сир арҡаһында Исраил улдары (йәһүдиҙәр) үҙҙәрен "Аллаһ тарафынан һайлап алынған халыҡ" тип иҫәпләй башлай. Ә беҙҙең замандарҙа ул ауырыуҙы нацизм, шовинизм, атеизм, сионизм, радикализм кеүек ҡурҡыныс миҫалдарҙа күрергә була.

Бер ваҡыт Мөхәммәт пәйғәмбәргә (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) бер төркөм йәһүдиҙәр килә. Улар Мөхәммәттең ысын пәйғәмбәрме, түгелме икәнлеген үҙҙәренең китаптарындағы күрһәтмәләр буйынса тикшереп ҡарамаҡсы икән. Йәһүдиҙәрҙең Тәүратында яңы ҡоткарыусы дин менән киләсәк Пәйғәмбәрҙең тышҡы ҡиәфәте тураһында тулы мәғлүмәт бирелгән булған. Әммә, китапта яҙылғандарҙың ысынбарлыҡ менән тап килгәнлеген күргәндән һуң да, улар кешелекте ҡотҡарасаҡ Пәйғәмбәрҙең йәһүдтәр араһынан түгел, ә бүтән халыҡтан булыуын ҡүтәрә алмай. Тәкәбберлек сире, үҙҙәрен бөйөк халыҡ тип иҫәпләүҙәре уларҙы шулай юлдан яҙҙыра.

Йөрәккә инеп оялаған тәкәбберлек кешенең нәфсеһенә туранан-тура йоғонто яһай. Ул Ҡөрьән аяттарын, хәҙистәрҙе яңылыш, үҙе теләгәнсә аңлай башлай, Аллаһы Тәғәләнең ерҙәге мөғжизәләрен күреү, тойоу һәләтен юғалта. Аллаһы Тәғәлә лә Ҡөрьәндә әйткән бит: "Мин рәхмәтһеҙ һәм тәкәббер кешеләрҙе дөрөҫ юлдан яҙҙырасаҡмын, улар Минең мөғжизәләремде лә күрмәй башлар". Әйе, ҡайһы берәүҙәр бит һәр ваҡиғала, һәр әйберҙә лә Аллаһтың сикһеҙ аҡылын, Уның бөтә нәмәне лә тәрән мәғәнә, билдәле максат менән барлыҡҡа килтергәнен күреп тора. Ә ҡайһы берәүҙәр өсөн ҡүктәр асылып, алдына фәрештәләр килеп төшһә лә, ул барыбер быны мөғжизә итеп күрмәҫ, Аллаһтың бөйөклөгөн танымаҫ, сөнки ундайҙарҙың йөрәге ҡатҡан. Муса пәйғәмбәргә ҡаршы сыҡҡан Мысыр фиргәүненә лә бит Аллаһы Тәғәлә туғыҙ билдә ебәрә, әммә үҙен "Күктәр улы" тип һанаған фиргәүен ул билдәләрҙе күрергә лә теләмәй. Аҙаҡ, Муса артынан ҡыуа төшкәс, бәйғәмбәр алдында диңгеҙ уртаға ярылғанын күрһә лә, туктап ҡалмай, уның юлы буйлап диңгеҙ эсенә сума, һәләкәтен дә шунда таба.

Тәкәбберҙәр үҙҙәренә ҡарата бөтәһе тарафынан да ихтирам көтә, әммә, көтеп ала алмайынса, бүтән кешеләргә көйөп, сирканып ҡарай башлай. Тәкәббер кешеләргә үҙ етешһеҙлектәрен күрергә ҡамасаулай. Был сир бер кешелә генә булһа ла, унан бөтә йәмғәт ыҙа сигә. Ә бына сәхәбәләр тураһында Аллаһы Тәғәлә Ҡөрьәндә былай тигән: "Улар бер-берсенә ҡарата тәкәббер түгелдәр һәм үҙҙәрен тыйнаҡ, ихлас тоталар, ә дошмандар иһә - тейешле рәүештә".

Тәкәббер кешеләрҙең хәлторошон күҙ алдына килтереп ҡарағыҙ: йыһан (беҙ уның сиктәрен дә һаман белмәйбеҙ!), йыһан өҫтендә Аллаһы Тәғәләнең Тәхете (Уның янында йыһан он бөртөгө кеүек кенә), шул йыһанда беҙҙең галактика (миллиондарҙың береһе), шул галактика эсендә беҙҙең Ҡояш системаһы ла бар (меңдәрҙең береһе), шул системала беҙҙең Ер шары әйләнеп йөрәй (бүтән "әйҙәш" планеталар менән сағыштырғанда - бәләкәй генә бер тупсыҡ), шул Ер шарында бер төртөк кенә булып һинең ҡалаң йә ауылың урынлашҡан, һин көн дә тапап йөрөгән урам, һин йәшәгән өс ҡатлы йорт, бына һин үҙең дә тәҙрәнән ҡарап тораһың... Күҙ алдына килтерҙегеҙме, Юлдан аҙашҡанынды ла белмәйенсә: "Беҙ, ырыу-ырыу булып йәшәүсе һәм ҙур-ҙур йорттар һалыусы ҡырмыҫҡалар, иң камил һәм бойондороҡһоҙ заттарбыҙ!" - тип сүллек гиҙеп йөрөгән ҡырмыҫҡа ише бит ул тәкәббер кеше. "Тәкәбберлек - ул Аллаһы Тәғәләнең өҫкө кейеме, ә бөйөклөк - аҫҡы кейеме кеүек. Ә бит ҡайһы бер кешеләр шул кейемдәрҙең береһенә дәғүә итеп маташкан була..." - тиелә хәҙистәрҙә.

Был ҡурҡыныс сирҙең сәбәптәре ниҙә һуң, Улар түбәндәгесә булыуы мөмкин:

- Әгәр бала тәкәббер атаәсә тәрбиәһендә үҫһә, уның йөрәгенә был сир ғәҙәти тойғо булып һеңә.

- Йыш мактап тороу ҙа тәкәбберлектең барлыҡҡа килеүенә булышлыҡ итә. Кешене уның булмаған йәиһә әле үҫешеп етмәгән сифаттары өсөн маҡтарға ярамай. Маҡтау дөрөҫ һәм урынлы булырға тейеш. Тәкәбберлек тойғоһо һиҙелә башлаған кешеләрҙе иһә бөтөнләй маҡтамай тороу зарур. - Ниндәйҙер юғары белемгә эйә кешеләр йәиһә вазифалы кешеләр менән аралашҡандар ҙа, ғәҙәттә, үҙҙәре лә һиҙмәҫтән, тәкәбберләнә башлай. Ҡулдарына диплом алдымы, йә берәй түрә менән ҡул бирешеп һаулыҡ һорашты-мы, үҙҙәрен Ер кендеге итеп тоя башлайҙар, бүтән "назан" һәм "ҡара эшсе"ләргә үҙҙәренсә йәлләп, ерәнеп ҡарайҙар.

Ғайса пәйғәмбәр үҙенең шәкерттәре менән һөйләшеп ултырған ваҡытта уның янына әлекке бер бур түбәгә килергә тип ингән булған. Шәкерттәрҙең берәүһе был бысраҡ бурҙы сирканып ҡаршы ала. Аллаһы Тәғәлә иһә ошо күренештән һуң бәйғәмбәргә ебәрелгән һүҙҙәрендә: "Кеше күрәләтә халыкты иңҡар итә, йә бүтәндәргә өҫтән ҡарай икән - бына шул ул тәкәбберлек. Мин теге бурҙың гонаһтарын ғәфү иттем, ә бер шәкертеңдең изге эштәрен юҡҡа сығарҙым", - тигән.

- Дини йә донъяүи белем туплауҙан, фән йә спорт йәһәтенән ниндәйҙер ҡаҙаныштарға ирешеүҙән, ҙур-ҙур дәрәжәләргә үрләтеүҙән дә был сиргә юлығыу мөмкин.

- Һәм, ниһайәт, кешеләрҙең бөгөн күптәре туплаған байлыҡтары арҡаһында тәкәбберлек сиренә дусар булыусан: яңы машина һатып алғандар, ҙур йорт һалып сыҡҡандар; әйөн затлы йыһаздар менән тултырғандар быларҙы ниндәйҙер сәбәптәр арҡаһында эшләй алмағандарға өҫтөн генә ҡараған була. "Улар әхирәтте һатып алдылар, үтә килемһеҙ булды уларҙың һатыу итешеүҙәре", - тигән был турала Аллаһы Тәғәлә.

Был донъяла беҙгә бирелгән бөтә ризыҡ-ниғмәттәрҙең дә, вазифа-дәрәжәләрҙең дә, ҡаҙаныш-уңыштарҙың да - Аллаһтан икәнен бер ваҡытта ла онотороға ярамай. Иң мөһиме, ошо бөтә бирелгәндәр өсөн беҙ аҙаҡ яуап тоторға тейеш буласаҡбыҙ: кемгә шөкөр иттек улар өсөн, ниндәй юлда сарыф иттек уларҙы?

Тәкәбберҙәр кешеләр алдында оятҡа ҡалыуҙан үлемдән ҡурҡҡан кеүек ҡурҡа, Аллаһы Тәғәлә алдында оятҡа ҡалыуҙары тураһында уйламайҙар ҙа. Ҡайһы берәүҙәр, мәҫәлән, сит кеше килгәндә сәйнүктән сәй яһарға ла ҡыйынһына, бының өсөн икенсе бүлмәлә ултырған ҡатынын саҡыртып алған була - әйҙә кемдең хужа икәнен күрһендәр, йәнәһе. Әммә Ислам бит улай түгел.

Миҫал өсөн, Ғүмәр ибн Абдулғәзиздең хәлифә булып ултырған саҒы. Ҙур ғына ҡунаҡтар ҡабул иткән мәлендә бүлмәһендәге лампаһы ҡапыл һүнеп ҡуя. Ҡунаҡтар уны йүнәтергә тип ынтыла, әммә хәлифә: "Ҡунаҡ кешегә йорт эштәрен ҡушыу - яраған нәмә түгел", - тип уларҙы туктата. "Улайһа, әйҙә, һеҙҙең малайығыҙҙы уятайыҡ", - тиҙәр. "Юҡ, уның бөгөн беренсе тапҡыр тыныс йоҡлаған төнө", - ти Абдулғәзиз һәм лампаны үҙе йүнәтергә тотона. Бына шундай булған беҙҙән алдағылар.

Һәм кем дә кем тәкәбберлек сиренән ҡотолорға теләй, ул иң тәүҙә беҙҙең пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәттән (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) үрнәк алырға тейеш. Ә ул ни эшләгән, Пәйғәмбәр һәм дәүләт башлығы булыуға ҡарамаҫтан, ул кейемен дә үҙе ямаған, бөтәһе менән дә бер иш ашаған, байҙар менән дә, ярлылар менән дә берҙәй һаулыҡ һорашҡан, һәр кемененең һорауына берҙәй ихласлыҡ менән яуап биргән, бер ҡасан да: "Был йә теге кеше үҙ мәшәҡәттәре менән барыһын да ялҡытып бөттө", - тип уфтанып ултырмаған. Әгәр кемдәлер яңы кейем, яңы ризыҡ, яңы ат күрһә: "Туғаным, Аллаһ хаҡы өсөн аша, Аллаһ хаҡы өсөн эс, Аллаһ хаҡы өсөн кейен, әммә ниәмәләр кеше һүҙе өсөн эшләйһең икән, бел: был - гонаһ, ә ундай ниәт менән акса сарыф итеү - харам", - тип әйтер булған.

Үрҙә яҙыр үтелгәнсә, шул тәкәбберлек сире арҡаһында Аллаһтың иң белемле, иң көслә хеҙмәтселәренең береһе, Иблис, Аллаһы Тәғәлә менән бәхәскә һәм әлеге ваҡытта кешеләрҙең ысынында ниндәй рәхимһеҙ, көсһеҙ, түбәнсел икәнен Аллаһҡа "танытыу" менән мәшғүл. Йөрәктәребеҙҙә тәкәбберлек тойғоһо баш төртә башлаһанын һиҙһәгеҙ, белегеҙ: был - шайтан ауырыуы.

